*Абдулхак* **ИГЕБАЕВ**

# ”Мин — ватансы, самими бер ижадсы...”



## Илем тураһында уйлайым

Күңел дәфтәремдең һәр бер битен
Ынйы хистәр менән нағышлап,
Өр-яңы бер шиғыр яҙмаҡ булдым
Тыуған илкәйемә бағышлап.

Асылда бит әйтер тойғоларым
Йәнгә үҙе керҙе йыр булып,
Һәм ошо йыр
сыңғырап ауаз бирҙе
Саф мөхәббәт булып урғылып!

Саф мөхәббәт булып урғылған йыр
Ул — Ватанға ҡайнар һөйөүем,
Унда минең сикһеҙ рәхмәттәрем,
Мәрхәмәткә тулы күңелем.

Мин — ватансы,
самими бер ижадсы,
Халҡым менән бергә һулайым,
Һәр милләткә һиллек,
тиңлек юрап,
Иртәгәһе көнөм,
туған телем,
Илем тураһында уйлайым.

Ә бәғзе хөсөт,
ят бауырҙар
Беҙҙең берҙәмлекте күралмай,
Оҙон телен тыя алмайынса,
Ғәйбәт һатып йөрөй оялмай.

Ә кемдәрҙер,
гонаһ-шомлоҡ ҡылып,
Гел этлеккә һалып баштарын,
Йәшерен-бошорон ҡаҡшатырға теләй
Ватанымдың нигеҙ таштарын.
Заманалар ифрат тынысһыҙ шул,
Һиҙгер булайыҡсы,
инсандар!
Бәрәкәттәре,
ҡөҙрәттәре менән,
Һимməттәре,
сихәттәре менән
Хозурланып атһын ал таңдар!

Мин — ватансы,
самими бер ижадсы,
Халҡым менән бергә һулайым,
Һәр милләткә һиллек,
тиңлек юрап
Иртәгәһе көнөм,
туған телем,
Илем тураһында уйлайым!

## Сабый күңелкәйе кителһә...

Сабый күңелкәйе кителһә,
Көнгә баҡҡан сәскә бойоғор.
Йәрен көтөп, ғашиҡ тилмерһә,
Аҡҡош ҡаурыйҙары ҡойолор.

Ауыр һүҙ ишетһә тол ҡатын,
Башын эйер ҡайын уфылдап.

Үкһеҙ етем сорлап илаһа,
Янартауҙар ҡуйыр һулҡылдап.

Сәсән бинахаҡҡа интекһә,
Һайрар ҡошсоҡ зарға һабышыр.
Буйҙаҡ уфтанғанда моңһоу ай
Болоттарға кереп аҙашыр.

Йәш килендең йәне әсенһә,
Өйәңкеләр сеңләр бөгөлөп.
Һалдат ыңғырашҡанда сал бөркөт
Тертләп китер хәүеф һиҙенеп.

Әсә бәғеркәйе әрнеһә,
Буръяҡланып даръя сайҡалыр.
Рәнйетелһә ата йөрәге,
Урал таштарынан ҡан тамыр.

Ҡыҙ керпеге йәшкә сыланһа,
Зәңгәр болан үкһер тынлыҡта.
Яугир йөрәген услап йығылһа,
Ҡапыл йондоҙ һүнер офоҡта.

## Ҡайтып төшһәң ине...

*Атаҡлы шағир*
*Шәйехзада Бабичка*

Һай, арҙаҡлы шағир Шәйехзада,
Ҡыңғырауҙар тағып пар атҡа,
Юл буйына көмөш моң сыңлатып,
Бер елдереп ҡайтып төшһәң ине
Беҙҙең яҡҡа,
күркәм Баймаҡҡа!

Күңелкәйең һулҡып һағынғандыр
Ҡоштар йырын,
Саҡ, Суҡ тауышын,
Был төйәктә тыуып үҫмәһәң дә,
Ошо ергә, ошо сал тупраҡҡа
Ереккәндер һинең яҙмышың.

Мосафирҙай аҙмы ҡыҙырҙың һин
Талашты һәм Шырҙы* буйҙарын,
Йөрәккәйең янған минуттарҙа
Устарыңа алып уртлап эстең
Темәс шишмәһенең һыуҙарын.

Бәғзе ваҡыт Рапат тигән тауҙың
Ҡыраз ташҡайына ултырып,
Йөрәкһенеп шиғри мәрйен теҙҙең
Табаҡ та ғына табаҡ аҡ ҡағыҙҙың
Ап-аҡ биткәйҙәрен тултырып.

Көмөш кенә башлы,
алтын ҡашлы,
Аҫыл мандолина ҡылдарын
Сиртә башланыңмы,
барса кеше
Һинең сихри моңдо тыңлар ине
Алмайынса хатта тындарын.

Яғалсаның* һомғол сауҡалары,
Һонолошоп үҫкән артыштар,
Алҡынып та аҡҡан Һаҡмарымдың
Ебәк тулҡындарын серҙәш иткән
Зифа буйлы һылыу ҡамыштар;

Һәр береһе, гүйә, өнһөҙ генә
Йәдкәр һөйләй һинең турала.
Мин белмәгән бик күп хәтирәләр,
Әйтерһең дә, серле йомғаҡ булып,
Күңелемә килеп урала.

Һин айҡаған биләндәргә сыҡһам,
Мәтрүшкәләр, төрлө сәскәләр.
Гүйә, зауыҡланып-илһамланып,
Ҡасандыр бер һинән отоп алған
Таҡмаҡтарҙы ҡат-ҡат әйтәләр.

Һине юҡһыныуҙан сағылдарҙа
Һыҡтап иңрәй кеүек йор ҡурай,
Күк Ирәндек ҡаяһына баҫып,
Әле булһа һине көтә төҫлө
Моңдарыңа ғашиҡ ҡоралай.

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,

*Талашты һәм Шырҙы — Темәс ауылындағы йылға исемдәре.
*Яғалса — тау исеме.

Ләкин, Бабич, һин бит ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилығын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң.

Ажар бөркөт һымаҡ
ғорур булдың,
О, юҡ, йөрөмәнең моңайып,
Урттарыңа ҡандар төйөлһә лә,
Хәсрәтеңде йөрәгеңә йотоп,
Йәш аралаш көлдөң йылмайып.

Ҡомһорап та сапҡан арыҫландай,
Көрәш майҙанына атлыҡтың...
Йылдар уҙған һайын уфтандырып,
Йәнен ҡырҡҡа телгән ҡайғыһы ла,
Ғорурлығы ла һин башҡорттоң!..

Нисә тапҡыр һине үлтерҙеләр,
Күпме яуызлыҡтар ҡылдылар,
Хатта исемеңде бөтөнләйгә
Халыҡ хәтеренән юйып ташлап,
Мәңге юҡ итмәксе булдылар!

Уҫал хөкөмдарҙар һәм ҡатилдар
Борондан уҡ шулай шашҡандар,
Илдең ут йөрәкле батырҙарын,
Сәсән телле мәшһүр шағирҙарын
Атҡандар, йә тотоп аҫҡандар!

Шундай аяуһыҙлыҡ һәм яуызлыҡ
Ҡабатланмаҫ тимә бөгөн дә,
Зәһәр ағыуҙарын сәсмәк булып,
Аждаһалар дулап ятмаймы ни
Яһилдарҙың йөрәк төбөндә!

Йыр быуыла һаман,
сәсәй заман,
Арта бара дошман хәйләһе...
Ә ҡайҙалыр ярһып-ужарланып,
Тағы ҡандар көҫәп йөрөй кеүек
Һине сапҡан ҡылыс шәүләһе.

Әй, самими тәбиғәтле Бабич,
Һине кем һуң, кем һуң онотор?
Әгәр онота икән, ул әҙәмдәр
Зиһен сәхрәләрен сафландырған
Рухи инештәрен ҡоротор!

Ғүмер баҡый атайсал тип яндың,
Ҡолаҡ һалдың заман ғәменә,
Ил-йортоңдоң, ете ырыуындың,
Армыт-армыт мәғрүр Уралыңдың
Моң-зарҙары һеңде йәнеңә.

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Мөхәббәтле шағир ҡайҙа бар?
Күңелеңдең аяҙ көмбәҙендә
Етемдәрҙең йәнен йылытырлыҡ
Ҡайнар ҡояш та бар,
Ай ҙа бар!

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Кешелекле шәхес ҡайҙа бар?
Саф көмөштәй матур йырҙарыңда
Ғашиҡтарҙың дәртен дөрләтерлек
Ихлас һөйөү ҙә бар,
наҙ ҙа бар!

Мөхәмәтзакир улы Шәйехзада,
Шиғриәттең йәүһәр тажы һин,
Мәңге баш эймәгән милләтемдең
Быуындарҙан быуындарға күскән
Милли моңо,
милли сазы һин!

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,
Ләкин, шағир, һин бит
ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилиғын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң!

Йөҙәр йылға тик бер тыуа тиҙәр
Таң ҡалырлыҡ йыр-моң маһиры,
Һинең маһирлыҡтың,
оҫталыҡтың
Урал илкәйендә тамыры...
Ана шуға, Бабич,
һин үлемһеҙ,
Халҡымдың һин даһи шағиры!

## Уҙманым түгел, уҙҙым мин

Кисмәнем түгел, кистем мин
Һыуын да,
уттарын да.
Елдерҙем дә,
һөрөндөм дә
Яҙмышым толпарында!
Күрмәнем түгел, күрҙем мин
Зауығын,
наҙҙарын да.
Мөхәббәт былбылым ҡалды
Йәшлегем яҙҙарында.

Түҙмәнем түгел, түҙҙем мин
Зарына, һағышына,
Мәгәр таш ырғытманым һис,
Ҡәһәрләп яҙмышыма!

Уҙманым түгел, уҙҙым мин
Бормалы юлдарын да,
Хәлбүки хаҡлыҡ теҙгенен
Ныҡ тоттом ҡулдарымда!

## Кавказ һырттарына артылып

Кавказ һырттарына артылып, мин
Ҡарсығалай ҡанат ҡағындым,
Әммә уйҙарымда,
хыялымда
Йәшәр еркәйемде,
илкәйемде,
Уралымды ифрат һағындым!

Көньяҡ ҡыҙҙарына бик ҡыҙығып,
Шиғри ялҡындарҙа ҡабындым,
Әммә уйҙарымда, хыялымда
Алсаҡ йөҙлө Иҙел һылыуҙарын
Мөкиббәндәр китеп һағындым!

Ачамгурҙар* сихри көй көйләһә,
Улар моңона мин табындым,
Әммә уйҙарымда, хыялымда
Ирәндектә үҫкән ҡурайымдың
Моң саздарын шундай һағындым!

## Ялбарыу

Ах, шашына мөртәттәр,
Шуға әрней бәғерем,
Был бәндәләр белмәй һис
Иман, Ҡөрьән ҡәҙерен.

Ялбарып һорайым мин:
Үҙ өммәтен яратҡан,
Үҙ динем тип йән атҡан
Инсафлы инсандарға
Ярҙам итсе, Тәңрем!
Ярҙам итсе, Тәңрем!

Яҙмыш шырлыҡтарында
Аҙашмаһын әҙәмдәр.
Ислам нурын балҡытып,
Рухыбыҙҙы сафландыр,
Хаҡ тәғәлә рәсүле —
Эй, Мөхәммәт пәйғәмбәр!
Эй, Мөхәммәт пәйғәмбәр!

## Алҡын һыулы Башҡорт күлендә

*Түбән Колыма район советы
башҡарма комитеты ҡарары
буйынса тундралағы бер күлгә
"Башҡорт күле" тип исем бирелде.*

Алыҫтағы күк монарлы йәйҙе
Хәтерләйем әле бөгөн дә,
Их, ул саҡта
ниндәй хозурланып,
Тулҡын ярып беҙ кәмәлә елдек
Алҡын һыулы Башҡорт күлендә.

Баш осонда аҡсарлаҡтар осто,
Ҡыйғас ҡанат ҡағып
ҡыйҡылдап,
Ҡуйы ҡамышлыҡтар араһынан
Йүгереп сығып
ҡаршы алды беҙҙе
Күл ҡоштары сут-сут сутылдап.

---
*Ачамгур — абхаз халҡының музыка ҡоралы.

Беҙ килеүгә шундай шатланғандай,
Ҡарпып-ҡарпып балыҡ уйнаны,
Шул балыҡлы,
томбойоҡло күлгә
Күҙҙәребеҙ ҡарап туйманы.

Зембер-зембер итте һыу өҫтәре,
Еләҫ кенә елдәр иҫкәндә,
Хыялдарға сумып,
Фәрит* дуҫым
Ғорурланып башҡорт йырын һуҙҙы
Мин дәртләнеп ишкәк ишкәндә.

Сәғәт һуҡты.
Бына сәфәрҙәштәр
Юҫыҡланыҡ тыуған ерҙәргә...
Яҡут илендәге мөғжизәләр,
Башҡорт күлендәге хәтирәләр
Ҡалды инде
һағынып һөйләргә.

## Ҡар өҫтөндә усаҡ ҡабыҙҙым

Ҡалын көрттәр ярып бара торғас,
Мин арманһыҙ булып ҡаңғырҙым.
Ә шулай ҙа боҙҙа, ҡар өҫтөндә
Гөлтөлдәтеп усаҡ ҡабыҙҙым!

Усаҡ янды... Гүйә, баҡыр төҫлө
Баҙлатты ул тере ҡуҙҙарын.
Ҡараштарым ҡуҙға төбәлһә лә,
Алыҫтарға китте уйҙарым.

...Хәтерендәме әле, хәтерендәме,
Оноттоңмо әллә ул саҡты?
Саф мөхәббәт мине солғап алды,
Дөрләткәндәй изге усаҡты!

Һүрелтмәнем уны... Ялҡынланып,
Күңелеңде һинең ялманы,
Ялҡын ялмаһа ла, йөрәгеңдәге
Боҙҙарҙы ул иретә алманы!

Һин боҙ булдың миңә... Ә бүтәнгә
Татлы бал да булдың, шәкәр ҙә!
Хәҙер яҙмыш моңһоу һуҡмағынан
Алып йөрөй мине сәфәрҙә.

Алыҫ юлдан арып-талып килеп,
Ҡар өҫтөндә усаҡ ҡабыҙҙым...
Үҙем киткән саҡта усағымды
Дөрләп янған килеш ҡалдырҙым!

Бәлки, йылынырҙар усағымда
Күңелдәре өшөгән кешеләр...
Был илаһи фани донъяларҙа
Аҙ тиһеңме минең ишеләр?!

## Ерҙә бар ғәйбәтте дөмөктөрһәм...

Ыжғыр елдәр түгел, оҙон телдәр,
Ах... яманат сәсә һәр ерҙә,
Дегет буямаҡсы була улар
Һөт шикелле ап-аҡ күңелгә.

Мин дә ошо зәһәр, ыу телдәрҙән
Яман һүҙ ишетәм көн һайын,
Ғәйбәт дегәнәктәре ҡаҙалғанға,
Йөрәк ҡан илайҙыр, моғайын...

Ҡан илайҙыр... әммә керпегемдә
Дошман күрмәҫ һис йәш тамсыһы,
Мин — дөрөҫлөк өсөн көрәшеүсе,
Хәҡиҡәттең ябай һаҡсыһы.

Уҫал ғәйбәт тәкмәстермәк була
Мине хаҡлыҡ тигән атымдан,
Муйыныма ҡороҡ ырғытып, ул
Быуып алмаҡ була алҡымдан.

Хаҡлыҡты мин хәтәр утҡа бирмәм,
Үҙем ҡртәлһәм дә, көйһәм дә...
Ерҙә бар ғәйбәтте дөмөктөрһәм,
Һис үкенмәҫ инем, үлһәм дә!

---

*Был урында башҡорт халҡының арҙаҡлы яҙыусыһы Фәрит Иҫәнғолов күҙ уңында тотола.